# Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре   (6 класс).

# Теркәүес.

- 1. Ниндәй теркәүестән ике теркәүес яһап була?

- 2. Ниндәй ике теркәүес һулдан уңға ла, уңдан һулға ла бер үк төрлө уҡыла?

- 3.Ниндәй теркәүес киреһенән уҡығанда ымлыҡҡа әйләнә?

- 4. Бер генә хәрефтән торған теркәүес буламы?

- 5. Ҡайһы теркәүестәр киреһенән уҡығанда ҡылым тмырына әйләнә?

- 6. Түбәндәге һүҙҙәрҙе нисә төрлө аңлап була?
- *Һауала - һауа ла, яғала – яға ла, ярала – яра ла.*
- *7. Әйт,ат, ин, елә, аҙ, кит* һүҙҙәрен теркәүестәргә әйләндерегеҙ.

- 8. «Үгәй» һәм «кәмит» теркәүестәрҙе табығыҙ. Улар ниндәй төркөмгә ҡарайҙар?

# Бәйләүес.

- 1. Ҡайһы бәйләүестәр һулдан  уңға ла, уңдан һулға ла бер төрлө уҡыла?
- 2. Ниндәй бәйләүесте киреһенән уҡығанда *оран* мәғәнәһендәге исемгә әйләнә?
- 3. Ҡайһы бәйләүесте киреһенән уҡығанда ҡылым тамыры була?
- 4. Составында сифат, исем, һан, рәүеш булған бәйләүестәрҙе һанап сығығыҙ.

- 5. Ниндәй бәйләүес исемдән һәм ымлыҡтан тора?
- 6. Ниндәй бәйләүес  ҡылымдың бойороҡ формаһы ла була ала?
- 7. Ниндәй бәйләүес сифат та, ҡылым да була ала?
- 8. Ниндәй бәйләүес исем дә була ала?

# Шаян hорауҙар.

- Ниндәй бәйләүес өс  өндән тора?
- Ниндәй бәйләүестәр «бойоророға» ярата?
- «Тиҫкәре бәйләүесте табып әйтегеҙ.

# Киҫәксә.

- 1. Исем дә булып йөрөй алған ниндәй киҫәксәләрҙе беләһегеҙ?
- 2. Ниндәй киҫәксә киреһенән уҡығанда сифатҡа әйләнә?
- 3. Ниндәй киҫәксәләр ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше лә була?
- 4. Ниндәй киҫәксәләр ымлыҡ та була ала?

- 5. Ниндәй киҫәксәләр киреһенән уҡығанда исемгә әйләнә?

- 6. Ниндәй киҫәксәләр киреһенән уҡығанда ҡылымға әйләнәләр?

- 7. Киреһенән уҡығанда һанға әйләнеүсе киҫәксәләрҙе табығыҙ.

- 8. Киреһенән уҡып ҡайһы киҫәксәне рәүешкә әйләндереп була?

# Шаян һорауҙар.

- Киҫәксәләрҙең ҡайһыһы атырға ярай?
- Ниндәй киҫәксәне «ағын»ға әйләндереп була?

# Яуаптар *(теркәүес).*

- 1. Йәки: *йә* һәм *ки*. 2. Әллә, әммә. 3. Йә – әй.
- 4. Була: *ә*. 5. Ҙа – аҙ., ла – ал, ни –ин, та – ат, тик- кит.
- 6. Дүрт төрлө: *һауала – һауа* һүҙенең урын-ваҡыт килеш формаһы, *һауалау* ҡылымының тамыр формаһы; *һауа ла* – исем менән **ла** теркәүесе, *һауыу* ҡылымының өсөнсө зат формаһы һәм **ла** теркәүесе һ.б. 7. Йә, та, ла, ни, әле, ҙа, тик.

Гүйә – «үгәй» тимәк – «кәмит». Гүйә –оҡшатыу, тимәк – һөҙөмтә теркәүесе.

# Яуаптар *(бәйләүес).*

- 1. Ала, аша, кеүек. 2. Табан – набат. 3. Тыш – шыт.
- 4. **Өс**өн, һым**аҡ**, ш**ике**лле, **төҫ**лө, **һай**ын, ар**ҡыр**ы, б**үтә**н, **баш**ҡа.
- 5. **Ҡар**ай. 6. Аша. 7. Ала. 8. Ҡала, табан.
- 1. Өсөн. 2. Аша, үтә. 3. Арҡыры.

# Яуаптар (*киҫәксә*).

- <u>1</u>. Бит, ҡына, уҡ.   <u>2</u>. Ҡына – аныҡ.   <u>3</u>.  Күм, тор, төр.

- <u>4. </u>Тыр, дор, дөр.   <u>5.</u> Күм – мүк, та – ат.   <u>6.</u> Ла - ал, со - ос.

- <u>7</u>. Сө – өс.   <u>8.</u> Ҙа – аҙ.

- <u>1</u>. Уҡ.   <u>2</u>. Ғына.